**Демонстрационная контрольная работа по родному (башкирскому) языку для 6 класса**

**Аңлатма һүҙ**

Башҡорт теле буйынса уҡыусыларҙың белем кимәлен баһалауҙың төп критерийҙары.

Контроль диктанттарҙы баһалау.

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй. Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим ителә. Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш. Диктантҡа билдә ҡуйғанда хаталарҙың характерына иғтибар ителә.Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупа: булмағандары,йәғни грамоталыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Түбәндәге хаталар тупаҫ булмағанға инә: ҡағиҙәнең иҫкәртмәһенә ҡараған хаталар, бәйләү юлы менән яһаған яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышында хаталар,бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу,үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ялғауҙар яҙылышында хаталар. Диктант бер генә билдәменән баһалана.“5” – тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә, “4”-4 орфографик, 3 пунктацион,йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа,5 орфографик хатаһы булған эшкәлә“4”ҡуйырға мөмкин.“3”–6 орфографик,6 пунктуацион,йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкәлә “3” ҡуйыла. “2”-9 орфографик,9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла. Хатаһаны15 орфографик хатанан да артып китһә “1” билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Контроль диктант:

| | |
|---|---|
| “5” | 1 орфографик,<br>2 пунктуацион |
| “4” | 1-2 орфографик,<br>2 -3 пунктуацион хата |
| “3” | 3-4 орфографик,<br>4-5 пунктуацион хата |
| “ 2” | 5 орфографик<br>4-6 пунктуацион хата |

**Ҡош юлы**

Башҡортмон тигән кеше өс нәмәне белергә тейеш. Беренсеһе — үҙенең ырыуын, ете быуынын. Икенсеһе —халыҡ йырҙарының тарихын.Өсөнсөһө—йондоҙҙарҙы айырырға,уларҙың исемдәрен белергә тейеш.

Йондоҙҙар бик күп. Ләкин кешеләргә уларҙың өс меңдән ашыуығына күренә. Күктең буйынан буйына һуҙылған яҡты бер һыҙатҡа иғтибар итегеҙ.Был йондоҙҙар һыҙаты Ҡош юлы тип атала.«Ҡош юлы»тигән хикәйәттә бар.Имеш, бер йылды торналар теҙелешеп йылы яҡҡа осҡан мәлдә ел-дауыл ҡупҡан. Бала торналар аҙаша башлаған. Шул саҡ оло торналар,ҡалғандарына юл күрһәтеү өсөн,ҡауырһындарын күк йөҙөнә сәскән,ти. **Был ҡауырһындар йондоҙға әйләнгән**.Ҡош юлы тигәндәре ана шунан ҡалған,ти.

**Функциональ грамоталыҡ буйынса эш төрҙәре:**

1.Билдәләнгән һөйләмгә синтаксик анализ эшләргә

2.Үҙ аллы һүҙ төркөмдәренә миҫалдар яҙырға